




# Ата-әсәйҙәр өсөн консультация

## Сабыйығыҙ балалар баҡсаһына йөрөй башлай ...

Балалар баҡсаһына йөрөй башлау менән бала тормошонда күп нәмә үҙгәрә: көн режимы, 9 сәғәт йәки унан да күберәк ваҡыт атай-әсәйҙәрҙән айырылып тороу, тәртип буйынса яңы талаптар, таныш булмаған бина, башҡа төр аралашыу.

Быларҙың бөтәһе лә бер юлы сабый иңенә төшә һәм уны туранан-тура стресс хәлендә ҡалдыра. Һөҙөмтәлә бала еңмешләнә, көйһөҙләнә, бөтә нәмәнән ҡурҡа, аппетиты юғала, йыш ауырый. Балалар баҡсаһына яраҡлашыу йәки адаптация осоро өс төргә бүленә: еңел, уртаса һәм ауыр өйрәнеү.

- Тәүгеһендә бала яңы шарттарға тиҙ өйрәнә, йәғни 10-15 көндә уның тәртибе нормәлләшә. Тән ауырлығы нормаға инә, коллективта үҙен яҡшы тоя, сир-сырхауға бик бирешеп бармай.
- Икенсеһендә балалар баҡсаһына бер айҙан һуң ғына ныҡлап яраҡлаша. Психик стресс билдәләре күҙәтелә, ҡыҫҡа ваҡытҡа тән ауырлығын юғалтыуы, 5-7 көн ауырыуы ихтимал.
- Өсөнсө төр адаптация осоронда баланың тәртибендәге һәм һаулығындағы үҙгәрештәр 2-6 ай дауам итергә мөмкин. Был ваҡытта улар яңы белемгә эйә булыу түгел, киреһенсә, белгән күнекмәләрен онота.

